*Розалия СОЛТАНГӘРӘЕВА*

# Быуат араһында

## Ҡобайыр

Эй-й! Тәңрем! Һин – Ҡояшым!
Тоғро йәнем, юлдашым,
Иң яҡты, нурлы Кешем,
Башлайһың тағы эшең –
Кемгә бирәһең көнөң,
Кемгә бирәһең төнөң,
Кемдең киҫәһең йәнен,
Ә кемдеңдер кендеген!
Эй, Ҡояшым! Эй, Тәңрем!
Ал минең һин сәләмем!
Шөкөрана һиңә әйтеп,
Тубыҡланып, усым асып,
Тәжем ҡылыр бар хәлем!
Ата-бабамса, йоласа,
Һинән көс алам бөгөн!
Бар башҡорт онотҡан йола –
Һиңә бағып – Ил бағыуҙы
Үҙем үтәймен бөгөн,
Ҡояшым, көс бир үҙең!
Һинең менән Илемә
Өндәшәмен мин үҙем.

Быуат менән быуат сигендә,
Береһе китәм һеҙҙән тигәндә,
Береһе киләм һеҙгә тигәндә,
Әҙәм бер-беренән биҙгәндә,
Мал, Дан тиеп үңәсен өҙгәндә,
Сүпкә сүмәлә өйөлгәндә –
Мин теләккә тағы ултырҙым,
Илаһ менән күңел тултырҙым...

Эй, Уралым, һинең өсөн һораным,
Именлектән айырмаһын Хоҙайым.
Башҡорт һөйәккәйҙәрендә тораһың,
Мәхшәр, ғәрәсәттәр һине упмаһын,
Әҫе ҡанын әҙәмдең һорамаһын
Рәнйегән ерем, һауам, һыуҙарым,
Ошо теләккәйҙәремде нығытып,
Доғаларға ҡушып әйтәм Ораным,
Тыңла мине, ишет мине, Уралым,
Һин ишетер, шөкөр, тел бар – ҡоралым,
Икебеҙгә бер тел биргән Хоҙайым.

Һине бирмәҫ өсөн хаин, кафырға,
Даръяларҙай ҡанын биргән башҡортоң.
Бөгөн үҙен һаҡлар өсөн Ут, Һыуҙан
Һиңә башын сөйөп һорай башҡортоң,
Тәүбәләрен әйтә бөгөн башҡортоң.
Урал бабам! Фатихаң биреп тороң!
Урал бабам! Мәрхәмәтең киң ҡылың!

Эй, Еркәйем! Минең бер кәҙеркәйем,
Еркәйем, байрамса еләнкәйем.
Мин әйтәмен – йыйы әле түҙемкәйең.
Минең менән бергә әйтә Илкәйем:
Шартлатҡаны, ҡаҙған, ҡаҡҡан, иҙгәне,
Нефть тиеп ҡандарыңды һурғаны,
Буйҙарыңа тимер ҡоршау ҡорғаны,
Нәжес, харам һиңә өйөп ҡуйғаны
Өсөн кисер беҙҙе, беҙҙе, наҙанды,
Күрһәтмә лә инде беҙгә ҡазаңды,
Һаҡла Урал, һаҡла инде баланды!

Серҙәреңдең бер сере бар – Арҡайым.
Тарихыңдың бер бите бит Арҡайым.
Астың битен, уҡы тип, башҡортҡайым,
Тимер, булат, утҡа баш халыҡҡайым,
Булған бит тип, алтындай башыҡайы.
Көслө кәүем булған ҡандай заманда!
Үҫтергән бит, һай, белекле уландар!
Бер кемгә лә баш бирмәгән ҡеүәтте
Ҡалтыратып тотҡан ҡорос ҡулында,
Илгә — илсе, яуға — яусы булғанда...

Эй, Арҡайым – ҡаны аҡҡан яраҡайым!
Доғалы түрең тағы яттар ҡулында,
Ғорур башың, ташың, тамғаң, сереңә
Баш булырға һәр кемең уйында:
Ер-һыуымдан, телдән, иректән көлгәндәр
Доға йыя һинең йомарт табында.
Татлы балды ялай ажар себендәр,
Батып ҡалырын уйламай ҡуйынында.
Тәбиғәт тигән Динемдән көлгәндәр
Үрмәләйҙәр һинең изге буйыңда.

Эте-бете, белгәне, белмәгәне,
Башҡорттоң еҫен дә һөймәгәне
Үрмәләйҙәр изге Шаман тауына,
Һаулыҡ һорап кәҙерле бер башына...
Ил тултырып ҡарай ситтән башҡорттар,
Ҡасан Әсә ҡарар тиеп улына...
Ҡасан Ер-һыу әйтер тиеп улына,
Шулай булды быуат-быуат буйына:
Алтын, йәшмә, мәғҙән – аяҡ аҫтына,
Егәрле ятҡа үсте – бауыр аҫтына,
Батыр, ғалим әйткәнде – баш аҫтына,
Мин-минлекте, кемлекте – баш өҫтөнә,
Ер һатылғас йыр сығарыу хаҡына –
Теш ҡуйылды мәлендә тел аҫтына!..
Шулай булыр микән быуат буйына?!

Арҡайымым! Асып һалсы халҡыңа:
Кил йышыраҡ, тиеп, минең алдыма,
Уҡы доға, ҡыл ғибәҙәт рухыма,
Ал фатиха балаң барыр юлына,
Мин бит һинең хаҡҡа ғына табылдым,
Эй, башҡорт, кил бөгөн, тиеп ҡаршыма!
Арҡайымым оран һала халҡына...

Серҙәреңдең тағы бере – Таналыҡ,
Белемдәрен уҡый ғына алманыҡ,
Һыу аҫтында инде баҡый ҡаласыҡ,
Белмәгәнде белер инде, тип, балыҡ...
Тағы теште тел аҫтына ҡалдырҙыҡ...
Бәләләрең һалма инде, Таналыҡ!
Ҡуйһын әле халайығың тын алып,
Ҡуйһын әле үҙ-үҙенә күҙ һалып,
Был мәлдә халыҡтан йәһәт бар ҡалып:
Хис-тойғо, рухты сикләр бар ҡалып:
«Боронғоно белеүҙән белмәү артыҡ –
Һәммәһе лә, имеш, боронғо халыҡ».
Алмаһын тип, башҡорт яңы таныулыҡ,
Китмәһен тип даны тағы таралып,
Ер хужаһы китмәһен һауаланып –
Тиеп батырҙылар һине, Таналыҡ,
Ҡазаларың һала күрмә ҡаласыҡ!
Эй, Үҫәргән! Саргон батша[1] бағынан
Киткәнһең шул – ҡалдыҡ йәшкә сумырлыҡ!

Эй, Уралым, оранынды уҡыйыҡ,
Тау үрҙәренә, башҡорттар, барайыҡ!
Тәңреләребеҙ ишетһен тиһәгеҙ –
Изге урындарҙа доға ҡылайыҡ!
Изге түбәләрҙә тәүбә ҡылмайынса,
Бер-беренде ашауҙан туҡтамайынса,
Күкрәк һуғып маҡтаныуҙан арынмайса,
Боронғо башҡорт данына һырынып,
Үҙ бурысҡайҙарынды ла онотмайса,
Хәләл бурыс барын үҙең онотмайса,
Быуат башы сыҡмаҫ гонаһ алмайыҡ!
Быуат башы сыҡмаҫ гонаһ алмайыҡ!

Һауам минең, эй татлы Һауам-Анам!
Дәүләтем, ҡотом, шифа, затлы дауам!
Күҙҙәрең ҡамашыр һөрөм тулғанды,
Йөҙҙәрең сирышыр ағыу һалғанды,
Ил-заводтар башы — торба-көбәктән
Һиңә төбәп әжәл утын атҡанды,
Биттәреңә ҡара битлек япҡанды,
Саңҡылдатып йыртып йәшең аҡҡанды,
Кисер, Һауам, кисер беҙҙең ҡылғанды.
Кисер, Һауам, йәнә кисер, баланды.
Эй, Күк Тәңрем, кисер башҡорт баланды.

Һауа-Анам! Хаҡ рәхмәтле теләктән,
Балаларың бөгөн әйткән теләктән,
Үңәстәрҙе үтеп сыҡкан күҙ йәштән,
Тулышыуҙан Диңгеҙ булган йөрәктән
Йыуат, Һауам, йыуат инде уйынды,
Таҙарт, Һауам, таҙарт инде, буйынды,
Беҙгә рәнйеп һала күрмә хафанды,
Беҙҙе ҡарғап ҡыла күрмә ҡазанды!
Йәшен йәшнәт, сылтырат ямғырынды,
Күпер итеп һал беҙгә йәйғоронды,
Атлат Күккә, атлат һин башҡортонды,
Күк Тәңрегә юлы бит онотолдо,
Шуға Тәңре Алла беҙҙән боролдо.
Туғыҙ дуғалы таж йәйғороң аҫтында,
Туғыҙ төҫлө тылсымдарҙың ҡашында
Доғаларың ҡабатлатып, ҡотолдор.
Һауа-Анам! Баланды һин ҡотолдор! Ау!
Һауа-Анам! Күпер ит йәйғоронды.

Һыу Тәңреһе! Кисер кеше төрлөһөн,
Сама белмәй тотонғанын, көллөһөн.
Күрәбеҙ бит һаман шуның кейәһен,
Рәнйеткәнбеҙ Һыуыбыҙҙың эйәһен:
Быуып нәжес менән унын үңәсен,
Илатҡанбыҙ Һыуыбыҙҙың инәһен,
Шуға ағыу үҙенән тик имәбеҙ!
Һыу Анаһы – ана бит ул, – кисерер,
Инде аһ-зарҙарын Әҙәм ишетер,
Ишетер ҙә, михнәттәрен күтәрер,
Бағ мейеһе – Һыу икәнен ул белер.
Бер тамсыла бар ғәләмдең асҡысы,
Ул асҡысты табыу – быуат баҫҡысы,
Бер тамсыла һәммә бәндә асылы,
Ул асылды таныр әҙәм аҫылы.
Кешенән дә тәрән икән Аҡылы –
Бар икән Һыу хәтере, Һыу Аҡылы –
Тигәнде белеп, Әҙәм тәүбәгә килер,
Килмәһә ки, һыу төбөндә бер серер...
Һыу телен өйрәнмәгәнгә үкенер.

Егерме лә берҙең быуаты башында,
Тәүбәләрҙе әйтәйек йән башынан.
Урман-тоғай, ер-һыуымдың алдында,
Һауам, Утым, ҡасҡан Ҡотом алдында,
Ап-аҡ ҡайын, тәрән ҡоҙоҡ алдында,
Байтирәктәр, батыр ҡәбере алдында,
Әүлиәләр әйткәндәре алдында –
Тәүбәләрҙе әйтәйек йән башынан,
Тәүфиҡтәрҙе йыяйыҡ йән башынан!
Тәбиғәт беҙҙе һаҡлаған хаҡына,
Был көнгәсә беҙҙе түҙгән хаҡына
Тәбрикләйек, башты түбән эйәйек,
Тәбиғәткә антыбыҙҙы бирәйек!

Инде Рухи хазинабыҙ – Телебеҙ!
Унан башҡа ни хәлебеҙ, көнөбөҙ.
Киҫкән, аҫҡан, боҫҡан, бөткән хәлдән һуң,
Морон төртөп тағы килә телебеҙ.
Таш бәгерҙе, таш ҡанунды ҡыйратып,
Суверенитет тигән данға ҡалҡынып,
Телкәйебеҙ ҡайтып килә талпынып,
Ҡаршылайыҡ барыбыҙ ҙа шатланып.
Ҡанатының бер осо «ҫары» унын,

[1] Саргон батша – беҙҙең эраға тиклемге X быуатта хакимлыҡ иткән батша, Үҫәргән башы.